

# “ТИРМӘ” ӘКИӘТЕ

Авторы: Уйылданова Нәрисә Миртимер ҡыҙы

**<u>Дәрестең маҡсаты:</u>**

**-әкиәт уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уятыу**

**-әкиәттәге хәл-ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле һөйләргә өйрәнеү**

**-әкиәтте ролдәргә бүлеп тасуири уҡырға өйрәнеү**

**-көтөлмәгән ауыр ситуацияларҙа аҡыл менән эш итергә , килеп тыуған проблеманан сығыу юлдарын хәл итергә өйрәтеү**


Сәләм!
Якшы
кәйеф һеҙгә!

# Бирелгән хәрефтәрҙән һүҙ төҙөп карағыҙ

# Ә р и м т



Тирмә — күсмә халыҡтарҙың ваҡытлыса йәшәү өсөн ҡулайлаштырылған торлағы. Ул быуаттан—быуатҡа тәбиғәт ҡосағында йәшәү тәжрибәһенен сағылдырған, бөтә талаптарға ла яуап бирә алған торлаҡ төрө. Һаҡлау, күсереү, урынлаштырып ҡуйыу өсөн бөтә яҡтан да уңайлы итеп уйлап табылған был ҡоролма башҡорттарға ла хас булған

Башҡорт тирмәһенең бер нисә төрө була:
а) «тирмә» — традицион көнкүреш тирмәһе;
б) «аш тирмә» — аш-һыу әҙерләү өсөн тәғәйенләнгән тирмә;
в) «ҡунаҡ тирмә», «аҡ тирмә» — аҡ кейеҙ менән ябылған ҡунаҡ ҡаршылау өсөн тәғәйенләнгән тирмә;
г) «Ун ике ҡанатлы аҡ тирмә» — иң ҙур тирмә — ырыу башлыҡтарына, хандарға тәғәйенләнгән.



Тирмәмдә
Тирмәм тора көмөш кеүек
Йылға ярында.
Хуш еҫле сәскәләр үҫә
Тирә яғымда.

Кетөүҙәр йөрөй. Мин үҙем
Ятам тирмәмдә.
Туғандарым, яҡындарым
Минең эргәмдә.

Шул саҡта тирмәм ишеген
Асырға ҡуштым.
Төн буйы тыңланым моңон
Һандуғас-ҡоштоң.

Ниндәй яҡшы, ниндәй татлы
Булды бөгөн төн.
Керпек тә ҡаҡмай үткәрҙем
Ошо төндө мин.
Салауат Юлаев





Тирмәне ҡатын-ҡыҙ ҙа бер сәғәт эсендә ҡуя алғаны тарихта билдәле факт. Ирҙәр өҫтәге ҡоршауҙы күтәрергә генә ярҙам иткән. Тирмә йылыны ла һәйбәт һаҡлай, йәйге эҫелә лә бында һалҡынса, йәмле була. Үтә нык эҫе көндәрҙә аҫҡы кейеҙҙе күтәреп ҡуйғандар



Дөйөм алғанда, уртаса тирмәнең ауырлығы (ябыуҙары менән бергә һанағанда) 400—450 кг, бейеклеге — 3 м, әйләнәһе — 16-18 м, диаметры — 8-10 м, торлаҡ майҙаны — 20 кв. м.



**Тирмәгә аяҡ баҫыу менән тирмәнең ҙурлығы бөтөнләй онотола: эске киңлеге һәм йыһазы үҙенең тынысландырыу һәләте, яҡлау көсө һәм ябай бәхет тойғоһо уятыуы менән ғәжәпкә ҡалдыра.**




Тирмә урынын билдәләүгә борондан ҙур әһәмиәт бирелгән. Урынды ат урап үтһә, йәки, мәсәлән, үрмәксе ҡаҙан аҫтында ау ҡормаһа — был ергә тирмә ҡуймағандар. Башҡорттар тәбиғәткә бик һаҡ булған: тирмәне ҡуйған саҡта доғаһыҙ ҡаҙыҡ ҡатмағандар, тирмәнең хайуандар өңөнә, эре ҡош ояһына яҡын булмаҫҡа тейешлеген белгәндәр.



Тирмә шишмәле- йылғалы, ҡоро, ҡалҡыу ерҙә урынлаштырылған.



Беренсе мәртәбә тирмә ҡуйған саҡта бағананы майлап, теләк тә әйткәндәр;

*Тирмә ҡотло булһын,*

*Бәрәкәт артһын,*

*Ҡото йоҡһон!*

*Киң ризыҡ килһен!*

**Былдай ырым — теләктәр бик күп булған.**



Тирмәнең тышҡы һәм эске биҙәлешендә ырыу билдәләре мотлаҡ сағылырға тейеш булған. Тирмә тышындағы кейеҙҙә, мәҫәлән, тамға күрһәтелер булған, ырыу әләме эленгән.




Тирмәлә йәшәүҙең дә үҙ ҡанундары булған: ингән-сыҡҡан саҡта уң аяҡтан башларға, тупһаға баҫмаҫҡа, тирмә эсендә ҡысҡырышыу — талашыу тыйылған, ашарға ултырғанда билдәле бер тәртип буйынса инеп ултырғандар.

**Юрғанына ҡарап, аяғыңды һуҙ**

**Эште боҙғанһың икән- йүнәт**